# Киң мәғлүмәт сараларының башҡорт милләтен рухи тергеҙеүҙәге роле

*Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының уҙған йылдағы һуңғы киңәйтелгән ултырыштарының береһендә киң мәғлүмәт сараларының милли мәсьәләләр менән бәйле эшмәкәрлегенә баһа бирелде. Уның эшендә республика баҫмалары, «Башҡортостан» телерадиокомпанияһы, күрше өлкәләрҙә сыҡҡан башҡорт баҫмалары мөхәррирҙәре ҡатнашты. Төп докладтар менән Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары Ҡ.А.Аралбаев, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте эргәһендәге Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ начальнигы урынбаҫары Ф.Ш.Ҡоҙаҡаев сығыш яһаны. «Ватандаш» уҡыусылары иғтибарына төп сығыштарҙы һәм киңәйтелгән ултырыш резолюцияһын тәҡдим итәбеҙ.*

**Ҡәҙим АРАЛБАЕВ,**
**Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы**
**Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары**

Башҡортостан Республикаһы суверенитет яулағас, Рәсәй Федерацияһының төрлө регионларында, үҙҙәренең боронғо аҫаба ерҙәрендә, ата-бабалары төйәгендә йәшәгән Силәбе, Ырымбур, Һамар, Һарытау, Ҡурған, Пермь башҡорттары ла рухи уяныу, милли үҙаңға, тарихи асылдарына ҡайтыу юлында һиҙелерлек сәйәси үҫешкә өлгәште, алға аҙым яһаны. Был ижтимағи хәрәкәт айырыуса «Урал» Башҡорт халыҡ үҙәге эшмәкәрлегенә, 1995 йылдың 1—2 июнендә Өфөлә уҙған I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы үткәрелеүгә бәйле яңы күтәрелеш, рухи тупланыу, әүҙемлек кисерҙе. Ошоларҙың барыһына ла бәйле, төбәктәрҙә башҡорт телендә баҫмалар сығарыу тормош талабына әйләнде.

2002 йылдың 14—15 июнендә уҙғарылған II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы резолюцияһында: «Күрше өлкәләрҙә һәм БДБ илдәрендә башҡорттар тупланып йәшәгән урындарҙа башҡорт телендә киң мәғлүмәт сараларын үҫтереүгә ирешергә, башҡорт телендәге ваҡытлы матбуғат сараларын Халыҡ-ара ваҡытлы матбуғат каталогына индереү сараларын күрергә», — тип бик асыҡ әйтелде.

Бөгөнгө көндә күрше төбәктәрҙә башҡорт телендә гәзиттәр нәшер итеүҙә ярайһы уҡ уңыштар ҙа бар. Мәҫәлән, 166 меңдән ашыу башҡорт йәшәгән Силәбе өлкәһендә «Уралым» гәзите (тәүҙә «Тыуған яҡ») 1990 йылда уҡ сыға башланы. Баш мөхәррире Урал Кәфи улы Сафиуллин баҫманың тиражын 6 мең данаға еткереүгә өлгәште. Октябрь айында гәзиттең 100-сө һаны донъя күрҙе. «Челябинский рабочий» гәзите башҡорт телендә ҡушымта сығара башланы. Өлкәнең Арғаяш районында «Арғужа» гәзите — «Восход» гәзите ҡушымтаһы нәшер ителә. Мөхәррире Ғилмениса Мәжит ҡыҙы Аҡҡужинаға уны киләсәктә үҙаллы баҫма кимәленә еткереүен теләйек.

53 меңгә яҡын милләттәшебеҙ йәшәгән Ырымбур өлкәһендә «Карауанһарай» гәзите ярайһы уҡ юғары кимәлдә сығып килә, уның 123 һаны донъя күрҙе. Баш мөхәррире Салауат Ғайса улы Аҡдәүләтов уны бик уҡымлы итеп әҙерләй. Яңыраҡ Башҡортостан Республикаһының Ырымбур өлкәһендәге вәкиллеге тарафынан йәнә бер баҫма — «Яңы тулҡын» гәзите нәшер ителә башланы.

Һамар өлкәһендәге 7885 башҡорт өсөн «Ырғыҙ» гәзите айына бер тапҡыр 300 дана тиражы менән сыға. Был баҫма — «Берҙәмлек» татар өлкә гәзитенең ҡушымтаһы. Мөхәррире — Сәлимә Басир ҡыҙы Краснова-Игенбетова.

Һарытау өлкәһендә 4 меңгә яҡын милләттәшебеҙ йәшәй, улар өсөн «Һарытау башҡорттары» гәзите 1 меңгә яҡын дана тиражы менән сығарыла. Мөхәррире — Тамара Даян ҡыҙы Фәттәхова. Баҫма — Перелюбская станицаһында сыҡҡан «Целинник» гәзитенең башҡортса ҡушымтаһы.

Ҡурған өлкәһендә йәшәгән 15343 башҡорт «Замандаш» баҫмаһын яратып уҡый. Баш мөхәррире — Ғәбдинур Әбделхәй улы Мәүләүилов. Гәзит 6000 дана тиражы менән сығып, бушлай таратыла.

35807 башҡорт йәшәгән Ханты-Манси Автономиялы Округында «Милләт нуры» гәзите спонсорҙар аҡсаһына нәшер ителә. Баш мөхәррире — Ләйсән Нурғәле ҡыҙы Аҡсулпанова.

Татарстандың Яр Саллы ҡалаһы башҡорттары гәзите урындағы «Шоңҡар» Милли-мәҙәни автономияһы тарафынан сығарыла, баҫма үҙе лә «Шоңҡар» исемен йөрөтә. Мөхәррире — Әлфиә Фәйзуллина.

Ҡырым Республикаһы татарҙары һәм башҡорттары федерацияһы «Ҡурай» исемле гәзит сығара. Шеф-редакторы — Марат Мозаһит улы Мәсәлимов.

Был баҫмаларҙың донъя күрә алыуы иң тәүҙә уларҙың мөхәррирҙәре фиҙакәрлеге, энтузиазмы менән бәйле. Башҡорт рухына инаныу әйҙәй уларҙы был эшкә. Ҙур рәхмәттәр әйтәйек уларға ҡоролтай исеменән.

Әлбиттә, гәзит сығарыу — коллектив эш, күмәк көс, берҙәмлек һөҙөмтәһе. Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте эргәһендәге Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ, урындағы

ҡоролтай етәкселәре, Камил Аблязов, Сергей Катасонов, Марсель Йосопов һәм башҡа спонсорҙар ярҙамынан тыш, был баҫмаларҙы сығарыу еңелдән булмаҫ ине. Йәнә, был эште башлап йөрөүсе, урынынан ҡуҙғатып, урындағы етәкселәргә уның мөһимлеген аңлатыусы энтузиастар, килеп сыҡҡан мәсьәләләрҙе көйләп тороусы абруйлы шәхестәр булыуы ла шарт. Һарытауҙа, мәҫәлән, шундай күренекле шәхес Зөфәр Шәмсивәли улы Хәкимов бөтә өлкә башҡорттары араһында киң билдәле.

Төбәктәрҙәге башҡорт баҫмаларының төп маҡсаты, йөкмәгән бурыстары ниҙәрҙән ғибәрәт һуң? Ул — тарихи төбәктәрҙә, үҙ ерҙәрендә йәшәгән милләттәштәребеҙҙең тормошон мөмкин тиклем киңерәк, тулыраҡ, тәрәнерәк яҡтыртыу, уларҙы Башҡортостан Республикаһы тормошо, милли сәйәсәте, иҡтисады, мәҙәниәте, әҙәбиәт, сәнғәт өлкәһендәге яңылыҡтар, мәғариф системаһы менән даими, эҙмә-эҙлекле таныштырып барыу; халыҡта, айырыуса йәш быуында тыуған телгә, тарихи тамырҙарға, мәҙәниәткә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу; этник үҙаң, милли үҙенсәлекте һаҡлау зарурлығын аңлатыу. Икенсе яҡтан, урындағы шарттарҙан сығып, төбәктәге мәсьәләләрҙе асыу мөһим — ошо нигеҙҙә һәр баҫманың үҙ йөҙө, үҙ стиле формалаша.

Төбәктәрҙәге гәзиттәрҙең байтағы башҡорт телендә генә сыҡмай. Мәҫәлән, «Карауанһарай», «Уралым» кеүек билдәле баҫмалар ҙа ике, хатта өс телдә ҡуллана. Моғайын, уларҙы башҡортса ғына сығарыу дөрөҫөрәк булыр ине, тип уйлайым.

Гәзиттәрҙә Башҡортостанда, Өфөлә сыҡҡан баҫмаларҙан күсереп алынған материалдар менән мауығыу ҙа һағайта. Әлбиттә, ундай материал да кәрәк, әммә баҫма иң тәүҙә үҙ йөҙөн, үҙ стилен булдырыу өсөн тырышырға тейеш. Урындағы проблемаларға күберәк иғтибар бирелһә, баҫма уҡымлыраҡ та, абруйлыраҡ та буласаҡ. Ул иң тәүҙә халыҡты рухи һәм мәҙәни яҡтан күтәреүгә йүнәлтелергә тейеш. Күрше өлкәләрҙә йәшәгән милләттәштәребеҙ үҙҙәренең баҫмаларында үҙҙәрен күреп торһа, ҡыуана, ғорурлыҡ кисерә, рухи терәк таба, ташҡа баҫылған һүҙҙең көсөнә ышана, берҙәмлеккә килә.

Өлгәшелгән тиражды һаҡларға тырышыу ихтирамға лайыҡ. Әлбиттә, ул редакцияның финанс хәленә бәйле. Гәзиттәрҙең даими, тотороҡло уҡыусылары булыуы һәйбәт: улар менән бәйләнеште өҙмәй тотоуҙың берҙән-бер шарты — тиражды кәметмәү һәм мөмкин булған тиклем арттырыу.

Былар барыһы ла редакцияларҙың матди хәле менән бәйле. Финанс мәсьәләләре, ҡағыҙ, компьютер техникаһы, кадрҙар һәм уларҙың социаль проблемалары бөтәбеҙгә лә таныш. Ул мәсьәләләрҙе ҡоролтай ойошмалары, урындағы хакимиәттәр, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте берлектә генә хәл итә ала. Был өлкәлә һуңғы йылдарҙа күпмелер тәжрибә тупланған, уны мөмкин булған тиклем файҙаланыу, артабан үҫтереү кәрәк.